Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

*Атайҙар өсөн практик семинар:*

# Балалар менән бергә эшләйбеҙ

(уртансылар төркөмө)


*Тәрбиәсе:*
Йыһангирова
Гөлнара
Марат ҡыҙы

# Балалар менән бергә эшләйбеҙ

**Практик семинарҙың планы**

1. Атайҙар өсөн консултация “ Атайһыҙ ғаилә – ҡыйыҡһыҙ йорт”
2. Балаларҙың ҡотлауҙары.
3. Атайҙар менән практик эш башҡарыу: Ҡағыҙ галстуктар һәм күлдәктәр эшләү

**Практик семинар барышы**

## 1. “Атайһыҙ ғаилә - ҡыйыкһыҙ йорт”

Хәҙерге ваҡыттағы ғаилә кризисы тураһында һүҙ ҡуҙғатҡанда, киҫекмәҫтән атайлыҡ һәм әсәйлек институты менән осрашабыҙ. Атайҙар проблемаһы киң таралыу алып тора ла, ниңәлер атайҙар тураһында һүҙҙе ҡуҙғатыусылар бик аҙ ғына. Хатта “Хәҙер ысын мәғәнәһендәге ир – егеттәр бөтөнләй юҡ, үҙҙҙәре өсөн генә йәшәүсе эскеселәр һәм әрәмтамаҡтар ғына ҡалған, ғаилә тураһында улар бөтөнләй уйламайҙар”, - тип әйтеүселәр ҙә күбәйҙе.

“Атаһыҙ ғаилә - ҡыйҡһыҙ йорт”, - тип халыҡ бушҡа ғына әйтмәгән бит. “Атаһы тере булып та атайһыҙ” һәм “ире тере булып та тол ҡатын” булыу, был психологик тойғолар, ауыр кисерештәргә килтерә түгелме?

Был проблема ысынында ла беҙҙең йәшәйешебеҙҙә ҙур урын алып тора. Был нимәнән килеп сыға һуң?

Ғаилә башлығының мәңге өйҙә булмауы бөгөнгө көндә иң актуаль проблемаларҙың береһе. Әлбиттә, йөҙ йыл элек тә атайҙар шул уҡ эш менән мауыҡҡандар.

Элегерәк атайҙар үҙҙәренең һөнәрен балаларына мираҫ итеп ҡалдырғандар. Берлектәге хеҙмәт ваҡытында балалары менән аралашыу ҙа, тәрбиә лә берлектә алып барылған.  Был процесс әлбиттә, быуындар араһын нығытыуға ғына килтергән. Бөгөнгө көндә йыш ҡына бала, аталарының ҡайҙа, кем булып эшләүен дә белмәй. Социологтар был феноменға “күренмәгән атай” тип исем дә биргәндәр.

## Ғаиләме, әллә карьерамы?

Күптәрҙең уйлауынса, ғаилә  бәхете өсөн аҡса ла, карьера ла төп шарт булып тормай. Йыш ҡына аҡса артынан ҡыуыу атайҙарҙы балаларынан, ғаиләһенән ситкә алып китә. Хәҙер бала менән аралашыуҙы, һөйләшеүҙе  сит итеп күрһәң, киләсәктә балаң менән йылы аралашыуҙы бер нисек тә кире ҡайтарып булмаясаҡ. Ә карьера буйынса күтәрелеү, профессиональ хыялдарҙы саҡ ҡына ситкә ҡуйып та тороп була, сөнки уларҙы һуңыраҡ та кире ҡайтарыуы ҡыйын түгел.

Ир – егеттәрҙең “бушамауы” менән бәйле, бала тәрбиәләүҙе тулыһынса ҡатын – ҡыҙҙыр үҙ ҡулдарына алдылар. Үкенескә ҡаршы ҡатын-ҡыҙҙар атай тәжрибәһен, өлгөһөн күрмәгән бер нисә быуын балаларын үҫтереп өлгөрҙөләр. Балалар тыуғандан әсәһенең янында, балалар баҡсаһына килгәс тә яндарында ҡатын –ҡыҙ тәрбиәселәр, мәктәптә- уҡытыусылар, ир – егет уҡытыусыларҙы ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ бит, институтҡа килһәләр ҙә күпселек уҡытыусылар ҡатын – ҡыҙҙар – күреүебеҙсә,  малайҙар, биологик яҡтан ир – егет булып тыуыуға ҡарамаҫтан, ҡатын –ҡыҙ ҡылыҡтарын һәм   менталитетын  үҙләштә башлай.

## Баланы яңғыҙ тәрбиәләү  ыңғай сара түгел.

Тулы булмаған ғаиләләрҙә  балаларҙың тулы кимәлдә тәрбиәләнмәүҙәре  туранан тура  был проблеманың бер өлөшө булып тора. Яңғыҙ килеш баланы тәрбиәләүсе әсәйҙәр, атайҙарҙың тәрбиә өлөшөн бер нисек тә тулыландыра алмайҙар, әсәйҙәр атай  ролен, ә атайҙар  әсәй ролен үтәй алмай. Бөгөнгө күпме генә бала: “Миңә атайым китап уҡыны, минең менән һөйләште”,- тип әйтә ала һуң. Специалистан билдәләүенсә, атайҙарҙың

балаға йоғонтоһо шул тиклем ҙур, хатта иң яратыусы әсәй ҙә, өләсәй, ҡартатай ҙа быны алмаштыра алмай, тип иҫәпләйҙәр.

Балаға ата-әсәһе үҙ ролен тигеҙ бүлешкән, дөрөҫ ғаилә моделе кәрәк. Был моделдә бала тик үҙенең ата-әсәһенән күреп кенә үҙләштерә ала.

**Атайҙар психологияһы.**

Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө көндә күп кенә атайҙар баланың өс йәшенә тиклемге үҫешендә атай роле ҙур роль уйнамай тип иҫәпләйҙәр. Ысынында был дөрөҫ түгел. Ткшеренеҙәрҙән күренеүенсә, аталары баланы тәрбиәләүҙә ҡатшаҡан осраҡта, бала яҡындары менән айырылышҡанда йәки сит кеше күргәндә (балалар баҡсаһында бигерәк тә) һирәк кенә илай. Бындай ғаиләлә үҫкән бала интеллектуаль яҡтан да күпкә үҫешкән, тормошта ла тиҙ адаптация үтә.

**Атайҙарҙан нимә кәрәк?**

Бала донъяны танып белә - иң тәүҙә үҙенең ата-әсәһен. Атайҙар баланы ҡулына алыуы, ҡосаҡлауы, балаға әсәһенән башҡа ла яҡын кешеһе булыуын, ул да уны яратыуын белгертергә ярҙам итә. Әгәр ҙә бала тыуғас та атаһының тын алыуын, уның ҡулдарының йылыһын, бармаҡтарының хәрәкәттәрен белмәһә, телмәр аша һәм күҙҙәре менән аралаша башлауға атаһы уның өсөн таныш булмаған бер өлкән кеше генә буласаҡ. Ата кеше балаға тышҡы донъяла йүнәлеш табырға өйрәтеүсе, тирә-йүндәге кешеләр, йәмғиәт менән дөрөҫ аралашырға өйрәтеүсе, йәмғиәттә яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләүсе, киләсәктә үҙ ғаиләһен төҙөргә дөрөҫ йүнәлеш биреүсе.

**Атайҙың ярҙамына мохтажлыҡ.**

Балаға атай ролен тулыһынса үтәүсе атай кәрәк. Фрейд әйтеүенсе: ”Балаға был тормошта иң кәрәге - уны яратыусы атай.Бала тыуғандан уҡ уның атаһы булыуын белергә, уның һәр саҡ ярҙам ҡулын һуҙасағын белергә тейеш”.

2. **Ҡотлауҙар, концерт номерҙары**

- “Ҡумыҙ менән бейеү” ҡыҙҙар өсөн.

- Камилла - йыр “Сәскә менән күбәләк”.
- Шиғырҙар.
- “Батмус” башҡорт халыҡ бейеүе.
- Г. Камила йыр “Олатайым ҡурайы”
- “Ватан” йыры.
- Йыр “Ерҙән һалдат атлай”
- бейеү “Беләҙегем йөҙөгөм”
- “Песня  О папе”

### 3. Практик эш.

Атайҙар ике командаға бүленә. Һәр командаға эш бирелә. Атайҙарҙы ҡағыҙ менән эшләү технологиялары менән таныштырыу.

1 команда күлдәк эшләй, ә икенсе команда галстук әҙерләй.



Эштең үҙмә – эҙлелеге:












## Галстук әзерләү

